# Бөйөк Еңеү.

Ҡанлы һуғыш 1941 йылдың 22 июнендә башланып китә. Бөтә ир-егеттәр үҙ теләктәре менән шул юғалтыулы һуғышҡа китәләр. Улар һуғыштан ҡурҡмай үҙ ерен һаҡлағандар. Һуғыш 1945 йылының 9 майында Еңеү менән тамамлана. Күп батыр һалдаттар ҡайтмаған. Ә ҡайтҡан ветерандарҙың түштәрен сыңлап торған миҙалдар биҙәй. Әлеге ваҡытта ветерандар бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына ҡалған.

Мәңге иҫтә ҡалған Бөйөк Ватан һуғышында минең ҡарт олатайым һуғышҡан. Ул Ямалетдинов Байгилде Ямалетдинович. Олатайым 1925 йылда тыуған. Ун алты ғына йәшендә һуғышҡа барған. Яраланған булған. Минең олатайым һуғыштың аҙағына тиклем йөрөп кире тыуған яҡҡа ҡайтҡан. Мин олатайым өсөн ғорурланам.

Быйылғы яҙ Бөйөк Еңеүгә 70 йыл тула. Кешеләр төрлө матур саралар, мәктәптәрҙә асыҡ дәрестәр үткәрәләр. Үлемһеҙ полкка олатайҙарҙың фотоларын йыялар. Күп парктарҙа күңелле концерт әҙерләйҙәр. Беҙ хор менән парк Якутовта йыр йырлаясаҡбыҙ. Халыҡ Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына бик ныҡ әҙерләнәләр.

Мин һуғыштан ҡайтҡан ветерандарға ғүмерҙәре буйына тыныслыҡ теләйем. Кешеләргә үҙҙәренең олатайҙарын хөрмәт итеп, иҫкә төшөрөп, үҙебеҙҙең тыныс еребеҙҙә мәңге йәшәргә теләйем. Булмаһын бүтән бер ниндәй ҙә һуғыш! Көтөлмәгән һуғыш. Һуғыш! Һуғыш ниндәй ҡанлы, ҡәһәрле, илаулы һүҙ. 1941 йылдың 22 июнендә Гитлер ҡаты, ҡанлы, хәбәрһеҙ һуғыш аса. Был һуғыш беҙҙең мәңге иҫтә ҡалды. Бөйөк Ватан һуғышында минең олатайым да ҡатнашҡан.

Өләсәйем һөйләгәнсә, минең олатайым Абдрашитов Абдулла Фатҡул улы. 1910 йылда Ырымбур ҡалаһында тыуған һәм шунда башланғыс кластарҙы уҡып бөтөрә. 1930 йылда ул үҙенең теләг буйынса фронтҡа китә. 1945 йылда минең олатайым иҫән ҡайта.

9 май 1945 йылда һуғыш бөткәс тә  күптәр ҡайтмағандар. Кешеләрҙең күҙҙәрендә шатлыҡ та, ҡайғы ла бар. Сөнки балалар атайҙарын һәм ағайҙарын, ҡатын ҡыҙҙар егеттәрен, әсәйҙәр ирҙәрен һәм балаларын юғалтҡандар. Күпме һалдаттар хәбәрһеҙ юғалғандар. Еңеү көнө быйыл 70 йыл. Был еңеү көнөнә класс сәғәттәрен һәм үлемһеҙ полк үткәрәләр, музейҙар һәм парктар төҙөйҙәр, шиғырҙар һәм йырҙар яҙалар, фильмдар һәм мультфильмдар төшөрәләр. Һәм быны Бөйөк Ватан һуғышына арнап эшләйҙәр.

Минең теләктәрем ябай булһала һеҙгә ветерандар ҙур иҫәнлек, ҙур бәхет, шатлыҡ һәм уңыштар теләйем һәм мин бик шатмын һеҙҙең еңеүгеҙгә! Һүҙемде Мостай Кәрим юлдары менән тамамлайым.

... Еңеү! Бер битендә ҡояш балҡый
Бер битендә моңһоу ай һаман,
Бер күҙенән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙенән әсе йәш тама!

Ғәлишина Гөлнәзирә 6класс уҡыусыһы